## ҺУҒЫШ ҠАҺАРМАНДАРЫНА БУШЛАЙ БИЛЕТ

*3 майҙан 12-һенә тиклем баш ҡалала йәшәүсе Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй аласаҡ. Акцияла трамвай-троллейбустар, "Башавтотранс" автобустары һәм үҙ эшмәкәрлегенә рәсми рөхсәте булған шәхси компаниялар ҡатнаша.*

Транспортҡа ултырған саҡта һуғышта ҡатнашыусы йәки инвалид танылығын күрһәтергә кәрәк буласаҡ. Бынан тыш, автовокзалдарҙа һәм аэропортта махсус транспорт бригадалары дежурлыҡта буласаҡ. Улар ветерандарға байрам тантаналары үткәрелгән ергә барып етергә ярҙам итәсәк.

Э. БУЛАТОВ.



СӘҒИҘУЛЛА ЙЫРСЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ, ЯҘЫУСЫ ЛА!

⇨6

ТЕПЛИЦАЛА АҠСА БАТША ТҮГЕЛ ⇨10

БӘХЕТ ХАҠЫ ⇨13

ҠОТОЛО ⇨15


Ал да нур сәс халҡыңа!

# Йәшлек

17 апрель, йома
2015 йыл.
№ 15 (11014)

Башҡортостан йәштәре гәзите
1923 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле





## «ЯНАУҘАР БУЛЫУЫ

Үәт, әй!

## ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ, ХАКЕРҘАР АҠСА УРЛАЙ

***Һуңғы ваҡытта "Бәйләнештә" селтәренең беҙҙең гәзит исемендәге сәхифәһенә пластик картанан аҡса юғалыуы хаҡында хәбәрҙәр йыш килә башланы. Һаҡлыҡ банкы картаһынан ғына ла 30 мең кешенең аҡсаһы эҙһеҙ юҡҡа сыҡҡан.***

Ҡорбандар – Android (Андроид – операцион система) базаһында смартфон ҡулланыусылар. Мутлашыусылар махсус вирус ебәргән икән. Йәғни кешеләрҙең Андроидлы телефонына банк программаһы ҡуйылған да, хакерҙар эш хаҡы йә кредит картаһына инеп, аҡсаға "айыу майы һөрткән". Шул уҡ ваҡытта банк ойошмалары, аҡса алыу-күсереү-һалыу үтә һаҡлана, тигән була.

Һаҡ булығыҙсы!

Мутлашыусы, һеҙҙең телефонда Андроид базаһы булыуын белгәс, бер программаны ҡуйып ҡарауығыҙҙы үтенәсәк. Йәнәһе, уға ебәргәндәр ҙә, эшләмәй, бәлки, һеҙҙә



ҡуйһағыҙ, бөттө, банк картағыҙ менән хакерға "эләгеүегеҙ" бик ихтимал. Ғөмүмән, бик яҡын дуҫығыҙҙан йә туғанығыҙҙан башҡа кешеләргә ышанмағыҙ! Кәрәкмәгән программаларҙы күсереп алмағыҙ. Тыныс та йәшәрһегеҙ, тырышып тапҡан аҡсағыҙ ҙа янда ҡалыр.

## АҘНА һорауы

# ТӘМӘКЕ ТАРТҠАН ӨСӨН ШТРАФ АРТЫРМЫ?

*Кисә БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай йортонда "Тирә-яҡтағы тәмәке төтөнө тәьҫиренән һәм тәмәке тартыуҙың эҙемтәләренән граждандарҙың һаулығын һаҡлау" 15-се Федераль закондың үтәлешен тикшереү буйынса ведомство-ара эшмәкәрлек алымдары" темаһына "түңәрәк өҫтәл" үтте. Уның төп темаһы, илебеҙҙең башҡа төбәктәре тәжрибәһенән сығып, республикала йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуға ҡаршы өҫтәмә саралар күреү булды.*
*Ә бына РФ Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Дмитрий Чугунов Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына полиция хеҙмәткәрҙәренә бәләкәй хоҡуҡ боҙоуға бәйле урында уҡ штраф һалыу мөмкинлеген биреү буйынса төҙәтмә индерергә тәҡдим итте. Әгәр ҙә проект ҡабул ителһә, йәмәғәт урындарында тәмәке тартыусыларға көн бөтәсәк. Хоҡуҡ һаҡлаусылар уларҙы фотоға төшөрөп, махсус базаға теркәп, штраф һаласаҡ.*
*Ошо һуңғы яңылыҡтарға бәйле, бер нисә кешегә: "Һеҙ йәмәғәт урындарында тәмәке тартыуға штрафты арттырыуға ниндәй ҡараштаъ?" – тигән һорау бирҙек.*

**Морат ИЛБАЕВ, ӨДНТУ студенты:**
– Тәмәке еҫе оҡшамай, гел дә тартҡан кеше

# «ЙӘШЛЕК» ХӘБӘРСЕЛӘРЕ ДИКТАНТТЫ НИСӘГӘ ЯҘҘЫ ИКӘН?

***Мәғлүм булыуынса, Рәсәйҙә һәм башҡа илдәрҙә һуңғы йылдарҙа «Тоталь диктант» тигән ҙур сара үткәрелә. Унда теләгән кеше ҡатнашып, үҙенең белемен тикшерә, мәктәп йылдарын иҫкә төшөрә. 11 апрелдә, был глобаль акцияны ҡеүәтләп, Өфөлә һәм республика кимәлендә «Башҡорт теленән региональ диктант» ойошторолдо.***

Әйткәндәй, беҙҙең гәзит тә сараны үткәреүгә күп көс һалды. Бер аҙна алдан «Бәйләнештә» селтәрендәге «Йәшлек» гәзите проекты» төркөмөндә һәм махсус пабликта диктанттың шарттары тураһында мәғлүмәт ҡуйылды. Аҙаҡтан бында фотолар менән танышырға мөмкин булды.

Бына, ниһайәт, 11 апрель килеп етте. Хеҙмәттәштәрем Алһыу Ишемғолова һәм Юлай Кәримов менән Башҡорт дәүләт университетының төп корпусы ишеген асып индек. Студент ҡыҙҙар юл өйрәтеп торғас, тәғәйен аудиторияны тиҙ эҙләп таптыҡ. Халыҡ та байтаҡ йыйылған. Башҡорт телен белергә, хатаһыҙ яҙырға теләгән йәштәрҙең күп булыуы һөйөндөрҙө. Үҙҙәренең теленә тоғро булған зыялылар, өлкәндәр ҙә күп ине.

Бер юлы ваҡиғалар үҙәге-



◆ Мәктәп йылдарын иҫләп, ошолай итеп диктант яҙҙыҡ.

тексы ауыр, һүрәтләүҙәрҙән тыш, тура телмәр, һандар бар.

Аудиторияға инәбеҙ. Имтихан мисәте һәм тәртип һандары ҡуйылған ҡағыҙ алып, ултырыштыҡ. Сара үҙ-үҙеңде тикшереү маҡсатында үткәрелгәс, исем-фамилияңды күрһәтергә кәрәкмәй. Бары тик ҡағыҙҙағы һанды иҫләп ҡалырға һәм уның буйынса акцияның сайтында яҙма эште

ләй оноткан. Телефондан һөйләгәнде йәки берәй сарала сығыш яһаусының һүҙен тиҙ генә теркәү өсөн яҙмам табиптарҙыҡына әйләнгән. Ә диктантты матур итеп яҙырға кәрәк. Ярайһы ғына ҙур һынау булды ул. Шулай ҙа барыһы ла тырышты, мәктәптә тамамлағанға әллә күпме йыл үтһә лә, белемдәре барлығын күрһәтте.

Ә был аҙнала Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә «Тоталь диктант» үтәсәк. Ишмөхәмәт Ғилметдин улы әйтеүенсә, уны ҡайһы бер интернет-ресурстар БДУ-ла үткән сара менән бутаған.

– Улар «В БашГУ пройдет тотальный диктант по башкирскому языку» тип хәбәр иткән. Ошоға бәйле, Новосибирск ҡалаһынан «Тоталь диктант» проекты авторҙары шылтыра-

ынтылам. Тукталыш-фәләндә, урамда көйрәтеүселәр үҙҙәренең генә һаулығына төкөрмәй, тирә-яктағы кешеләрҙекенә лә зыян килтерә. Тартҡан дуҫтарымды тыйырға тырышам.

Урамда йөрөгәндә егеттәргә ҡарағанда матур ҡыҙҙарҙың ҡулдарында тәмәкене йышыраҡ күрәм. Улар ышығыраҡ мөйөштәрҙә ҡасып-боҫоп тора, көпә-көндөҙ кеше алдында көйрәткәндәре лә бар. Быныһы бигерәк тә аяныслы. Штраф ярҙамында бер аҙ тәртип урынлаштырып булмаҫмы икән?

**Зөлхизә СӘЛИХОВА, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты:**

– Тәмәкенең организмға зыян килтергәнен барыбыҙ ҙа беләбеҙ, әммә ул һаман да нык таралған. Кемдер уның менән үҙен тынысландырһа, кемдер пафос өсөн тарта. Мин тәмәке еҫенә түҙә алмайым, тартып ҡарағаным да юҡ. Ҡаптарының тышына ниндәй генә ҡурҡыныс һүрәттәр төшөрһәләр ҙә, рекламаны туҡтатһалар ҙа, хаҡын арттырһалар ҙа, тәмәке тартыусылар һаны кәмемәй.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың был насар ғәҙәткә бирелеүе үтә аянычлы. Уларҙың күптәре, тәмәкенең зыяны юҡ, экология насар булғас, зәғиф балалар тыуа, тип яңылыш фекер йөрөтә. Кешеләр үҙ һаулығын һаҡлаһын, егеттәр, ҡурайҙа уйнағыҙ, спорт менән шөғөлләнегеҙ, ә ҡыҙҙар, үҙегеҙҙең гүзәл зат икәнегеҙҙе онотмағағыҙ ине.

**Айҙар ХОҘАЙҒОЛОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:**

– Тәмәке тартыуға ҡаршымын. Ҡыҙҙарҙың никотинға бирелеүе айырыуса ытырғаныс күренеш. Дуҫтар әйтеүенсә, Өфөлә тәмәкегә ҡаршы закон үтәлә, хоҡуҡ һаҡлаусылар кешеләрҙе тыя. Ә бына беҙҙә улай уҡ һөҙөмтәле эшләмәйҙәр. Тәмәкегә ҡаршы эш алып барырға кәрәк. Ҡәтғи закондар сығарырға, штраф күләмен арттырырға мөмкин. Штрафты түләтеү ҙә көс талап итәсәк. Был мәсьәләләрҙе өйрәнергә, юридик механизмдарҙы көйләргә кәрәк.

**Айгиз ИҪӘНДӘУЛӘТОВ, Өфө ҡалаһы:**

– Тукталыштарҙа өлкәндәрҙең балалар алдында тартып тороуын нык яратмайым. Урам буйында китеп барғанда ла көйрәтеүселәр етерлек. Тәмәкегә ҡаршы законды тағы ла көсәйтһәләр, яҡшы буласаҡ. Исмаһам, тартҡан ҡыҙҙар кәмер ине.

**Эдуард БУЛАТОВ яҙып алды.**

бара башланым. «Диктантты ҡайһы сайтта тапшырасаҡтар?», «Аҙаҡтан һөҙөмтәләрҙе нисек белергә?» тигән һорауҙарға яуап бирәм. Ошондай мәлдәрҙә заманса технологиялар менән гәзит уҡыусыларҙың хәлен беләһең, бер юлы улар алдында ҙур яуаплылыҡ та тояһың икән.

Диктанттың тексын М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, РФ-ның һәм БР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев уҡыны.

– Бөгөн күп кеше алдында бындай амплуа менән тәүгә сығыш яһайым, – тине әңгәмә барышында Хөрмәтулла Ғаззали улы. – Балаларыма дәрес әҙерләшкәндә диктант яҙҙыртып ҡарағаным булды. Кисә генә университет профессорҙары, уҡытыусылар миңә нисек уҡырға, тыныш билдәләре ҡуйылышын аңлатырға өйрәтте. Авторҙың уйын, уның нимә әйтергә теләгәнен аудиторияға еткерә белеү ҙә ҙур көс талап итә. Диктанттың мөмкин.

БДУ ректоры Николай Морозкин һәм уҡыу эше буйынса проректор Юлай Янбаевтың сығышынан һуң диктор яҙма эште уҡый башланы. Барыһы ла диҡҡәт менән Йыныбай Хамматовтың «Башҡорттар китте һуғышҡа» романынан өҙөктө тыңлай. Экранда университеттың Бөрө, Сибай, Стәрлетамаҡ, Нефтекама ҡалалары филиалдары күренә.

Ошо мәлдә телефонға интернеттан хәбәрҙәр килә башланы. «Бөтә класс менән көтәбеҙ, сайтта тапшырыу күренмәй», «Ҡасан онлайн-трансляция башлана?» тигән һорауҙарҙы яҙҙылар. Үкенескә күрә, техник сәбәптәр арҡаһында Хөрмәтулла Үтәшевтың тексты уҡыу мәлен шунда уҡ интернетҡа һалыу мөмкинлеге булманы. Филиалдар араһындағы видеоконференция ла өҙөклөк менән барҙы. Әйткәндәй, әле үҙҙәренең белемен һынап ҡарарға теләүселәр өсөн regdict.bashedu.ru сайтында диктанттың видеояҙмаһы бар.

Гәзиттә эшләү дәүерендә ҡул матур яҙыу тигәнде бөтөн диктант тәүгә генә үткәрелһә лә, бөтә ҡуйылған маҡсаттар ҙа тормошҡа ашты. БДУ-ның журналистика кафедраһы доценты, идеяның авторы һәм сараны ойоштороуға күп көс һалған Рәшиҙә Мәһәҙиеваның фекере шулай.

– Университеттың иң ҙур аудиторияһы диктант яҙырға теләүселәр менән лыҡа тулыуына һөйөнәм, – тине Рәшиҙә Рәфҡәт ҡыҙы. – Филиалдарҙа ла кешеләр күп булыуын үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек. Диктантҡа ҙур ҡыҙыҡһыныу булыр, тип уйлағайныҡ һәм яңылышманыҡ. Уны киләһе йылда ла үткәрергә ниәт бар.

Яҙмаларҙы БДУ-ның башҡорт теле ғилеме һәм этномәҙәниәт белем биреү кафедраһы мөдире Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы урынбаҫары Ирена Ҡолһарина, БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының Лингвистика һәм мәғлүмәт технологиялары үҙәге мөдире Фәйрүзә Ғарипова һәм университет уҡытыусыларынан торған эксперт комиссияһы тикшерҙе.

ландығыҙ, тип етди дәғүә белдерҙе. Аҙаҡтан был һүҙҙе «региональ» тигәнгә алмаштырттыҡ, – тине ул.

Башҡортса диктант яҙыу «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» республикабыҙ законын тормошҡа ашырыу буйынса БР Хөкүмәте ҡарамағындағы комиссия менән БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты тарафынан ойошторолдо. Киләһе йылдарҙа ла был эш дауам итәсәк, акцияға Ҡурған, Силәбе, Пермь, Ырымбур яҡтарында йәшәүсе башҡорттар ҙа ҡушыласаҡ.

Диктант мәлен Юлай Кәримов фотоға төшөрҙө. Һүрәттәр менән «Йәшлек» гәзите проекты» төркөмөндә таныша алаһығыҙ.

*Әйткәндәй, диктантҡа ниндәй баһа ҡуйылыуы хаҡындағы мәғлүмәт кисә сайтҡа ҡуйылмағайны әле. Был хаҡта киләһе һанда хәбәр итербеҙ.*

**Айбулат ИШНАЗАРОВ.**

**Юлай КӘРИМОВ фотоһы.**

## КЕЙЕМ ГЕНӘ ЫШАНЫС ӨҪТӘМӘЙ ШУЛ...

Был бурҙар теләгән әйберен алыр өсөн ниндәй генә алымдар уйлап тапмай?! Уларҙың хәйләһенә ҡайһы саҡта көнләшергә була. Түбәндә бер уғры тарихы.

Спорт кейемдәре магазинына милиция формаһы кейгән бер егет инә. Погондарынан майор икәне беленә. Янында һөйкөмлө генә ҡыҙыҡай ҙа бар. Һатыусылар уларға артыҡ иғтибар ҙа итмәй. Егет бер нисә кейемде һайлап ала ла, кейеп ҡарар өсөн шаршау артына инеп китә. Унан сыҡҡас, тура ишеккә йүнәлә. Тик асып та өлгөрмәй, полиция килеп тота. Баҡһаң, "майор"ҙы күптән һағалағандар икән.

Ошонда ғына иҫкә төшә – беҙҙә хәҙер милиция юҡ бит инде. Һатыусылар ҙа онотҡан, күрәһең. Ә егет ни бары 2,5 мең һум торған футболканы ғына урлаған. Был тәүге табышы түгел – полицияға бер нисә магазиндан әйбер кейеп сығып киткәне билдәле. Тотолғанда "майор"ҙың үҙе менән аҡсаһы ла булған, тик ул футболканы "былай ғына" алырға теләгән. Бур полицияға бер аҙыҡ-түлек баҙарында склад мөдире булып эшләүен әйткән. Милиция формаһын ҡайҙан һәм ҡасан алғанын да онотҡан. Кешене ышандырыр өсөн кейеп ала икән. Асыҡлауҙарынса, был әҙәм, уғрылыҡта ғәйепләнеп, бөтәһе 18 йыл төрмәлә ултырып сыҡҡан. Тимәк, урлашыу ҡанына һеңгән инде. Хәҙер ул, урлауҙан да бигерәк, енәйәтендә форманы файҙаланғаны өсөн дә яуап бирәсәк.

**А. АҠБУЛАТОВА.**